ВОСХОД
№31 (10129)
Пятница
16 августа 2024 года
АРГАЯШ МЕДИА
ARGAYASH.COM

АРҒУЖА

БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ МАХСУС БИТ №2 (155)
АВГУСТ 2024 ЙЫЛ

**МАТУР ТРАДИЦИЯЛАР**

# Ә ҺЕҘ ҒАИЛӘ ҠОМАРТҠЫЛАРЫН ҺАҠЛАЙҺЫҒЫҘМЫ?

ЯҢЫРАҠ ТЫУҒАН АУЫЛЫМ СУБЫЛДА ЯЛ ИТКӘНДӘ, МИҢӘ «ҒАИЛӘ ҠОМАРТҠЫҺЫ» ТИГӘН БИК ҠЫҘЫҠЛЫ САРАЛА ҠАТНАШЫУ БӘХЕТЕ ТЕЙҘЕ

**ЗИЛӘ ӘҺЛИУЛЛИНА,**
*музыка колледжының туған тел уҡытыусыһы, Өфө ҡалаһы*
**Милә СОЛТАНОВАНЫҢ фотоһы**

**Мәҙәниәт йортоноң ишектәрен асып, мин икенсе донъяға күскәндәй булдым. Быға иҫке ғаилә фотоһүрәттәре, сигелгән таҫтамалдар, боронғо милли күлдәктәр, семәрле һандыҡтар, ҡуҙ үтеге, тирмән, ҡул тирмәне, йөн иләгестәр, стена сәғәте...**

Әйтерһең дә, ошо сәғәт уҡтары шул дәүерҙә туҡтата кеүек. Ауыл халҡы үҙҙәренең ғаилә ҡиммәттәрен башҡалар ҙа күреп-танып белһендәр өсөн был күргәҙмәгә береһен дә ҡалдырмай алып килгән.

## САМАУЫР – ҺЕҘҘЕҢ БӨЙӨКЛӨГӨГӨҘ

Әммә иң ҡыҙыҡлыһы, улар был әйберҙәрҙең тарихы тураһында һөйләгән ваҡытта башланды. Был ҡомартҡылар кемдеке булған, нисек уларҙы һаҡлап ҡала алған, кемдән кемгә был ҡиммәтле байлыҡ тапшырылған... Әлбиттә, өҫтәлдәр беҙҙең яратҡан башҡорт аш-һыуҙарынан һығылып торҙо: бауырһаҡ, шәңкә, йыуаса... Ә табындың төп биҙәге – 1865 йылғы самауыр. Был самауыр Ғизәтуллиндарҙың ғаилә ҡомартҡыһы, уларҙың нәҫеленә 159 йыл хеҙмәт итә. Уның тарихы менән Рәсимә Йәмилева таныштырҙы. Тағы бер данлыҡлы самауыр тураһында Динә Ғәли ҡыҙы Үлмәҫҡолова һөйләп үтте. Студент йылдарында уҡ уны ағалары бүләк итә. Шул ваҡыттан алып ул был ғаилә ағзаларын берләштереүсе булараҡ ҡәҙерле. Төрлө байрам, йәш туйҙарын билдәләгәндә ул туғандарҙы ата-әсә йортона йыя. Луиза Нәби ҡыҙы Мәхмүтованың һандығында уның туй күлдәге, фатаһы, әсәһенең француз яулыҡтары, камзулдары һаҡлана. Был ҡомартҡылар, һис шикһеҙ, мода музейы экспозицияһын биҙәй алыр ине.

Нәғимә Хужа ҡыҙы Усманова ҡыҙы Эльвира Хикмәт ҡыҙы Ғизәтуллина менән үҙ ғаилә ҡомартҡылары хаҡында һөйләне. Улар диңгеҙсе Хикмәт Сибәғәт улы Ғизәтуллиндың моряк формаһын, ырыу шәжәрәһен, иҫке ҡиммәтле фотоһүрәттәрҙе ауылдаштары иғтибарына тәҡдим итте. Фәрзәнә Фәрит ҡыҙы Тауабилова әсәһенең яулыҡтарын һәм сигелгән әйберҙәрен нисек ошо көнгә саҡлы һаҡлағаны хаҡында ентекләп һөйләне. Апалы-һеңлеле Миңзифа Хафизова һәм Мәрйәм Хәйбуллина ата-әсәләренән ҡалған ҡиммәтле әйберҙәрен: туй кейемен (әсәһенең ҡулдары менән сигелгән алъяпҡыс), һауыт-һаба, фотоһүрәттәрҙе тәҡдим итте. Иң ҡиммәтле ғаилә ҡомартҡыһы – атаһының, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Зәйнулла бабай Хәйбуллиндың хәрби наградалары.



Китапханасы Руфина Байрамғолова өсөн ысын күңел байрамы, ауылдаштары, уҡыусылар сираттағы сараға йыйыла.

## ХӨБӘНИСА АПАЙҘАН КЕЛӘМ

Ләлә Ғәтиәт ҡыҙы Хөсәйенованың өләсәһе туҡыған келәме нисек яңы күренә! Уның тураһында хәтер Тәҡиуллиндар ғаиләһендә быуындан-быуынға сайпылтмайса тапшырыла килә. Ауылдаштары оҫтабикәгә бик тә рәхмәтлеләр, уны бик хөрмәтләйҙәр, сөнки күп кенә ҡыҙҙар оҫтабикәнең келәмдәре менән кейәүгә сыға. Уға бар өлкәнән заказдар бирергә киләләр. Ләлә Ғәтиәт ҡыҙы Тәҡиуллиндар Һөйәрғоловтар нәҫеленең һәм фамилияһының тарихын һөйләне. Уларҙың ғаиләһендә шулай уҡ үҙ ырыу ҡатын-ҡыҙҙарының сиккән, һуҡҡан таҫтамалдары һаҡлана.

Фәйзуллиндар ғаиләһендә әсәһенән ҡалған бөтә нәмәне ҡәҙерләп һаҡлайҙар. Был мираҫты ҡыҙы Гөлнур Такый ҡыҙы Үлмәҫҡолова тәҡдим итте. Сигелгән сағыу таҫтамалдар, ҡулдан эшләнгән сумка (муҡса), йәш сағынан алып ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем кейгән көмөш әсә балдағы. Ғаиләлә яҡшы йола барлыҡҡа килгән: ҡыҙҙар (уларҙың барыһы һигеҙ) йыл һайын әсә иҫтәлегенә арналған аят ваҡытында ҡомартҡы балдаҡты йыл буйына кейеп йөрөр өсөн алмашлап бер-береһенә тапшыра бара.

Эльмира Ғимадисламоваға өләсәһенән күлдәге, ҡушъяулығы һәм янсығы ҡалған. Ире яғынан өләсәһе уға доғалар менән китаптар тапшырған. Эльмира Ғиззәт ҡыҙы был ғаилә ҡомартҡыларының тарихы менән оло ғорурлыҡ кисереп уртаҡлашты. Апалы-һеңлеле Флүрә Ситдиҡова менән Илфирә Сатлыҡова тирмән, йөн иләгес һәм һандыҡ алып килде. Тирмән әсәйҙәренән, һандыҡ Илфирәнең мәрхүм ире өләсәһенән иҫтәлеккә ҡалған.

Фәрзәнә Фәрит ҡыҙы Тауабилова әсә мираҫын – яулыҡ, ҡушъяулыҡты тәҡдим итте һәм 103 йыл йәшәгән өләсәһенән отоп алған таҡмаҡты йырланы, йылы хәтирәләре менән ихлас уртаҡлашты.

Рәмзиә Юнысова өләсәһенең беләҙеген һәм балдағын, шулай уҡ документтарын, фотоһүрәттәрен һаҡлай. Минһылыу Шәрипова байрамға әсәһенең яулығын ябынып килде, ул ауылдаштары күңелендә бик күп изге һәм ҡәҙерле хәтирәләр уятты. Ирле-ҡатынлы Фәрит һәм Хәлиҙә Ишкилдиндарҙың быйыл ғаилә ҡороуҙарына 55 йыл тула. Никах туйын сағылдырған фотоһүрәт һәр кем күңеленә хуш килде. Улар танышыу мәлдәре, мөхәббәт һәм ғаилә тормошо тураһында һөйләнеләр. Ауылдаштары уларҙы бергә йәшәүҙәренең матур юбилейы менән ихлас ҡотланы.

## БАЙРАМҒА ЙӘМ БИРЕҮСЕ

Китапхана мөдире Руфина Рәмил ҡыҙы Байрамғолованы ауылдаштары «аяҡлы музей» һәм үҙ ырыуының, ауылдың тарихын һаҡлаусы тип атай. Уның исеменә бик күп рәхмәт һүҙҙәре яңғыраны. Һәм, әлбиттә, был иҫ киткес байрамды ойоштороусы һәм идеялары менән илһамландырыусы мәҙәниәт йортоноң «Шишмәләр» фольклор коллективы етәксеһе Милә Кашшаф ҡыҙы Солтанованың роле баһалап бөткөһөҙ. Уның бик күп ҡыҙыҡлы идея башланғыстары, проекттары бар, уларҙа ауылдаштары ҙур теләк менән ҡатнаша. Ололар ғына түгел, йәштәр ҙә, үҫмерҙәр ҙә ғаилә ҡомартҡыларына ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡарай, уларҙың тарихын һаҡлай һәм улар тураһында күберәк белергә тырыша, йолаларҙы быуындан-быуынға юғалтмай тапшырыуға тырышлыҡ һалалар.

**МИЛӘ СОЛТАНОВА –**
*Яңы Субыл мәҙәниәт йортоноң «Шишмәләр» фольклор коллективы етәксеһе.*



**– Яҡташтар менән бындай осрашыуҙар артабанғы эш өсөн бөтмәҫ илһам бирә. Уларҙың күберәк ойошторолоуын теләйбеҙ. Был саралар ҙа беҙ бер-беребеҙҙе яҡшыраҡ беләбеҙ, иң яҡшы ғаилә йолаларын иҫкә төшөрәбеҙ, ата-бабаларыбыҙ васыят иткән мираҫты ҡәҙерләргә һәм һаҡларға өйрәнәбеҙ. Һәм, әлбиттә, иң ҡәҙерле кешеләребеҙҙе – әсәләребеҙҙе, атайҙарыбыҙҙы, өләсәйҙәребеҙҙе һәм олатай-өләсәйҙәребеҙҙең яҡты рухтарын иҫкә алабыҙ.**

**ПОЧТАНАН**

## МӘСӘЙ АУЫЛЫНДА – АУЫЛ КӨНӨ

**Июлдә Мәсәй ауылында Ауыл көнө байрамы үтте. Быйыл байрам дүрт аймаҡтың береһе сираттағы таулылар тарафынан уҙғарылды.**

Көн эҫелеге лә хатта һиҙелмәне, сөнки байрамға килгән ҡунаҡтар оло ялан ағаслығында уңайлы ышыҡ урындарға урынлашҡандар ине.



Байрам өсөн Хәйбуллиндар, Кинйәсолтановтар һәм Хәбисолтановтар ғаиләһе өс һарыҡ бүләк итте. Шулай уҡ Кинйәсолтанов Рауфан да ит менән ярҙам итте. Өҫтәлдәр байрам аҙығы менән бай булды. Һәр ваҡыттағыса, байрам аят уҡыу менән башланды. Байрамды Резеда Ижбулдина алып барҙы. Балалар өсөн уйындар, конкурстар ойошторолдо. Ололар ҙа ситтә ҡалманы. Ҡорман мәҙәниәт йортоноң «Йәйғор» эстрада-фольклор төркөмө байрамдың концерт өлөшөн биҙәне. Шулай уҡ ҡунаҡҡа килгән Лидия ла үҙенең моңло йырҙарын башҡарҙы. Күңеле булған ҡунаҡтар хатта бейеп тә алдылар.

Байрам «Ғаилә көнө» менән тап килгәнлектән, 50 йыл бергә ғүмер иткән парҙарҙы ла бер уңайҙан тәбрик иттеләр. Кинйәсолтановтар, Йәрмөхәмәтовтар ғәиләһе 50 йыл иңгә-иң терәшеп, һоҡланғыс ғүмер итәләр.

Силәбе өлкә башҡорттары ҡоролтайы «Ҡурай» ағзалары һәм Арғаяш районы ҡоролтайының рәйес урынбаҫары Мәрзиә Сәғретдинова ла байрамда ҡатнашты. Улар ауыл тормошонда әүҙемлек күрһәткән ғаиләләргә Өлкә һәм район ҡоролтайының грамоталарын һәм маҡтау хаттарын тапшырҙылар. 95 йәшлек Хәкимова Фәхриямал, ауылдың иң оло кешеһе булараҡ, ҙур шәл менән бүләкләнде. Байрам күңелле ойошҡанлыҡ менән үтте, ҡунаҡтар ҙа яҡшы кәйеф менән таралды.

*Сабира ШӘРИПОВА,*
*Ҡорман ауылы.*

***«Аргужа» сығарылышы өҫтөндә Гөлъямал Нәжмиева, Сабира Шәрипова составындағы йәмәғәт редакцияһы эшләй. Нурия Иҡсанова тәржемәһе.***

ҺҮҘ ҺОРАЙЫМ

# ТУҒАН ТЕЛЕБЕҘҘЕ БИШЕКТӘН ҮК БЕЛӘБЕҘ

**ФӘЙХҮНӘ ҒӘЛӘЛ ҠЫҘЫ ИСМӘҒИЛЕВА –**
*ветеран-уҡытыусы, Халыҡ мәгарифы отличнигы. Ҡуянбай ауылы, Арғаяш районы.*

*Әсәм теле наҙлы ла,*
*Әсәм теле яғымлы ла,*
*Әсәм теле һөйкөмлө лә,*
*Әсәм теле шифалы ла,*
*Әсәм теле тылсымлы ла,*
*Әсәм теле моңло ла!..*

Һәр милләт кешеһе үҙенең теле менән донъяға килә. Үҙ телендә һөйләшергә, уҡырға, яҙырға өйрәнә. Әсә теле белмәгән кеше үҙенең тамырын онота. Әгәр ундай кешеләр күбәйһә, милләт юғала, тигән һүҙ. Ата-әсәһенән өйрәнмәгән бала үҙенең туған телендә һөйләшмәй, балалар ҙур кластарға еткәс, улар менән башҡортса аралашыу бик ҡыйын, яуапты бер-ике һүҙ менән генә алаһың, башҡорт һүҙҙәре тупаç, дөрөç килеп сыҡмай, әҙәби тел менән бәйләнешле булмай.

Ҡалала йәшәгән башҡорт балалары әсә телендә бөтөнләй һөйләшә белмәйҙәр, бер нәмә лә аңламайҙар башҡортса – ниндәй ҡыҙғаныс! Телде онотоуҙың төп сәбәбе – ғаиләлә. Әгәр балалар менән аралашыу үçкәнсә тик башҡортса булһа, уларҙың һүҙ байлыҡтары ла күбәйә, аралашыу ҙа аңлайышлы була, тылсымлы һүҙҙәр ҙә ҡулланыласаҡ. Туған телде өйрәнеүҙе балалар баҡсаһынан уҡ башларға кәрәк. Балалар баҡсаһында аралашыу – шиғырҙар, әкиәттәр тыңлау, йырҙар һәм төрлө уйындар өйрәнеү, уйынсыҡтар менән уйнау һәм башҡалар тик әсә телендә үткәрелһә ине! Сөнки, ғалимдар фекеренсә, бала туған телендә алған белемде бер ҡасан да онотмай, мәктәптә ул белем киңәйтелә, нығытыла бара.

Һәр ауылда, ҡалала балалар ауыл, ҡала тарихы менән, тыуған ере, башҡорт халҡының йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, кейемдәре, аш-һыуҙары, йырҙары, бейеүҙәре менән, уның фольклоры менән танышырға тейеш. Мәктәптәрҙә балалар өсөн башҡортса йырҙар йыйынтығы, музыкаль инструменттар – ҡурай, ҡумыҙ булһын ине. Мәктәптәргә башҡортса журнал, газеталар кәрәк. Бала телмәре үçешендә «Аҡбуҙат», «Аманат» журналдары, «Йәншишмә» газетаһы әйтеп бөтөргөһөҙ файҙалы ҡулланма.

Башланғыс мәктәптәрҙә факультатив дәрестәрендә «Тормош һабаҡтары»н үткәреүҙе, экологик белем биреүҙе бик мөһим, тип ҡарайым. Сөнки тәбиғәтте һөйөү, уны һаҡлай белеү – кешелеклелек мөнәсәбәттәргә өйрәтә, гүзәллекте аңлаусы кешеләр тәрбиәләй. Минең өсөн иң ҡәҙерле тел – башҡорт телем. Мин туған телемде яҡшы беләм, әсәм телендә һөйләшәм, яҙам, аралашам, башҡортса уйлайым. Минең моңом, телем – үҙ халҡымдан, мин милләтем йырҙарын – оҙон көй булһынмы, ҡыçҡаһымы – яратып башҡарам, мандолинала башҡорт көйҙәрен уйнайым. Үҙ телемдә яҙған шиғырҙарым, йырҙарым күп. Мин тәбиғәт биргән рухи байлыҡҡа эйә булырға тырышам.

Хөрмәтле ата-әсәләр! Балаларығыҙҙы әсә теленә, әҙәби башҡорт теленә, өйрәтеп үçтерегеҙ. Тел юғалһа – милләт тә юғала. Һаҡлайыҡ, киңәйтәйек, әсә телен юғалтып ҡалмайыҡ! Ҡатын-ҡыҙ милләт әсәһе икәнен онотмайыҡ! Туған телем, башҡорт телем мәңгә йәшәһен!

### *ТЫУҒАН АУЫЛЫМ*

*Тыуған ауылым минең, Ятраҡолом,*
*Шунда үтте минең бала сағым.*
*Ата-бабам шунда тыуып үçкән,*
*Ер эшкәрткән, малын үçтергән.*

*Халҡы уның өс аймаҡтан торған –*
*Әлмән, кәкребаш, сувандар.*
*Бер туғандай булып йәшәгәндәр,*
*Ауырлыҡты бергә күргәндәр.*

*Ауылымдың тәбиғәте матур:*
*Бер яғында Һары йылғаһы,*
*Икенсе яғынан Мейәс аға,*
*Алыç түгел Урал тауҙары.*

*Урманында төрлө йәнлектәр күп,*
*Төрлө ҡоштар тынмай һайраша.*
*Һанап бөтөргөһөҙ емештәре,*
*Төрлө бәшмәктәре юл аша.*

*Һары йылға буйы суҡ-суҡ муйыл*
*Яҙын ап-аҡ шәлгә төрөнә.*
*Уның хуш еçтәре киң йәйелеп,*
*Күңелдәргә шифа, көс бирә.*

*Хәҙер ауылым минең киң, ҙурайған,*
*Халҡы уның төрлө милләттән.*
*Ауылым үçә, йәшәрә, гөрләй,*
*Йәмдәр таба халҡым хеҙмәттән.*

*Берҙәм, татыу йәшәгеҙ, ауылдаштар,*
*Бер ваҡытта ла тарҡалмағыҙ!*





### *БЕСӘЙЕМ*

*Бесәй, бесәй, бесәйем,*
*Бигерәк матур бесәйем!*
*Өçтөндә биҙәкле күлдәк,*
*Башында төçлө кәпәс.*
*Ҡара сәсен тараған,*
*Ике яҡҡа бүленгән,*
*Күҙҙәре – зәңгәр ынйылар,*
*Ҡояшҡа йылтырайҙар.*
*Аяғында – аҡ нәски,*
*Исеме уның Ләси,*
*Бик аҡыллы, бик унған,*
*Таҙалыҡты яратҡан.*
*Иртә тороп кирелә,*
*Тырнаҡтарын яңырта.*
*Уның тәне һығылмалы –*
*Ни ҡылһа ла, килешә.*
*Башта битен таҙарта,*
*Бик еткереп йыуыша,*
*Битен, ҡулын, ҡолаҡтарын,*
*Муйынын да таҙарта.*
*Ҡойороғо менән уйнай,*
*Өйөрөлә – тота алмай.*
*Өйөрөлә, үҙенсә*
*Сысҡан тотам, тип уйлай.*
*Бик әҙәпле туйына,*
*Түкмәй-сәсмәй аҙығын.*
*Һуңынан тағы йыуына,*
*Шунан миңә һыйына.*
*Мыр-мыр килә, һөйөнә,*
*Тыныс йоҡоға тала...*

ФОТОГАЛЕРЕЯ

# Быйндай каникулдарҙы балалар онотмаясаҡ

**Йәш быуынға башҡорт мәҙәниәтенә, халыҡ йолаларына ҡыҙыҡһыныу һәм һөйөү тәрбиәләү буйынса ҙур эште энтузиастар алып бара.**

Таһир Абдрафиҡов – «Арыçлан» милли спорт төрҙәре федерацияһы етәксеһе Туғыҙбай ауылы янында урынлашҡан «Тамыр» этно үҙәген ойоштороусы Руслан Нафиҡов менән берлектә бына инде бер нисә йыл «ҡырыс уҡсы» лар турнирын ойоштора. Башҡорт уғынан атыу өсөн уға ярышырға Силәбе өлкәһе, Башҡортостан уҡсылары ғына түгел, башҡа өлкәләрҙән дә киләләр. Турнирҙың йәштәр өсөн айырым номинацияһы булдырылған. Балалар өлкән остаздары менән бергә уҡтан атыу күнекмәләрен үҙләштерерә, 1812 йылғы Ватан һуғышы йылдарында дан ҡаҙанған башҡорт уҡсыларының данлы тарихын өйрәнә.

«Алтын ҡурай» проектын ойоштороусы Рушания Нишанова менән бергә Эльвира һәм Руслан Нафиҡовтар Арғаяш районының Зәңгәр лагерында балалар өсөн йәйге тирмә, башҡорт уҡтан атыу нигеҙҙәре буйынса оçталыҡ дәресе үткәрҙе, балаларҙы башҡорттарҙың милли кейеме менән таныштырҙы. Рушания Нишанова Арғаяш районы хакимиәте менән берлектә тәүге тапҡыр лагерҙа этнографик смена ойошторҙо, башҡа шундай уҡ энтузиастар ярҙамында бик күп ҡыҙыҡлы осрашыуҙар, дәрестәр үткәрҙе, балаларға ике аҙнаға башҡорт мәҙәниәте донъяһына сумырға мөмкинлек бирҙе.









*Римма Хибәтуллинаның фотоһы.*